***Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,***
***филология фәндәре докторы***

# Ижади көстәребеҙҙе барлап

## (Совет осоронан һуңғы әҙәбиәтебеҙ хаҡында бер нисә һүҙ)

Илебеҙҙә һикһәненсе йылдарҙың икенсе яртыһынан уҡ башланып киткән өҙлөкһөҙ «үҙгәртеп ҡороуҙар», сәйәси һәм иҡтисади реформалар Советтар Союзы тигән ҡеүәтле дәүләттең тарҡалыуына ғына килтереп ҡалманы, тотош йәмғиәт тормошон бутап, болғап ебәрҙе, халыҡтың күпселек өлөшө ҡырағай капитализм шарттарында баҙап, юғалып ҡалды. Йылғыр әҙәмдәр, ил байлығына тиҙ генә ҡул һалып, сереп байып китһә, бүтәндәр көнөн-көнгә ялғап, хәйерсе хәлендә йәшәргә мәжбүр булды. Был йылдар заман елдәренә йөҙ бороп, һәр саҡ ҡулайлашып йәшәргә күнеккән кешеләр өсөн, әлбиттә, бик уңай ине. Совет осорондағы партократтар, «аҡ һөйәктәр», хәҙер «демократ» битлеген кейеп алып, шул уҡ юғары даирәлә, власть «обойма»һында өйөрөлә башланы. Заманында үҙен бар булмышы менән атеист, диндең хас дошманы итеп күрһәткән кисәге идеологтар, парторгтар, комсоргтар, башына сәллә урап, түбәтәй кейеп, мәсет тупһаларын тапарға тотондо, хатта мулла булып китте. Илдә алдашыу, урлашыу, фәхишәлек, енәйәтселек киң таралды. Әле тегендә, әле бында «ҡыҙыу нөктә»ләр барлыҡҡа килде, уларҙың фажиғәһе күптәргә ҡағылды. Йәштәрҙең ҙур өлөшө наркомания, токсикомания, эскеселек сиренә тарыны.

Әлбиттә, яңы Рәсәй дәүләтселеге формалашыуы шарттарында ыңғай күренештәр ҙә күп булды һәм була тора. Республикабыҙ күпмелер дәрәжәлә үҙаллылыҡҡа өлгәшә алды. Башҡорт телендә телевидение һәм радио тапшырыуҙары бермә-бер артты, башҡорт һәм башҡа милли телдәрҙә ваҡытлы матбуғат баҫмалары күбәйҙе, яңы милли мәктәптәр, лицей һәм гимназиялар асылды. Билдәле дәрәжәлә һүҙ азатлығы һәм шәхес иркенә юл ҡуйылғас, үткәндәрҙе, халҡыбыҙ тарихын һис ниндәй идеологик ҡыҫымһыҙ, нисек булған — шулай яҡтыртырға, коммунистик ҡоролош йылдарында репрессияға, онотолоуға дусар ителгән шәхестәрҙең исемен халҡына кире ҡайтарыу, аҡлау эштәрен йәйелдерергә мөмкинлек тыуҙы. Кешегә донъя көтөү өсөн эш, шөғөлдө үҙенә һайларға, шәхси эшҡыуарлыҡ юлына баҫырға шарттар булдырылыуы ла, һис шикһеҙ, прогрессив аҙымдар. Әммә эшһеҙлек, ил иҡтисадының ҡыйратылыуы был аҙымдарҙы сикләп тора.

Ошондай ваҡиғалар һәм күренештәр фонында һүҙ сәнғәтенең дә үҙгәреүе бик тәбиғи. Шуны әйтергә кәрәк, «тормош көҙгөһө» булған нәфис әҙәбиәт илдә барған процестарға эйәреп кенә үҙгәрмәне, ул заман менән бергә барҙы, бергә

үҫте, хатта айырым осраҡтарҙа буласаҡ хәл-ваҡиғаларҙы алдан иҫкәртте һәм уларға үҙенсә йоғонто яһаны.

Һүҙ ирке, һүҙ азатлығы — демократияның иң ҙур ҡаҙанышы. Художестволы әҙәбиәттә ул һулар һауа кеүек кәрәк. Шунһыҙ һис ниндәй үҫеш, алға китеш юҡ. Башҡортостан яҙыусыларының 2001 йылда уҙған XIII съезында, ошо мәсьәләгә ҡағылып, Яҙыусылар союзы идараһының ул саҡтағы рәйесе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев түбәндәгеләрҙе әйткәйне: «Һүҙ — кешелектең иң ҙур байлығы, һәм уны һаҡларға кәрәк. Уны бысраҡлыҡтан таҙартырға, асылындағы кешене рухландырған, күңелен күтәргән сафлығына ҡайтарырға кәрәк... Шуныһы ҡыуандыра: ошо ауыр йылдарҙа ғына түгел, үҙенең барлыҡ тарихында башҡорт әҙәбиәте һис тә һүҙ менән һатыу итмәне, кешенең рухи бөйөклөгөн кәмһетмәне. Башҡорт китабы, башҡорт матбуғаты һис ҡасан да милли ыҙғыштарға саҡырманы, бер халыҡты икенсеһенә һөсләтмәне, бер ваҡытта ла диндәрҙе, халыҡтарҙы, илдәрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйыуға этәрмәне»[1]. Заманында был һүҙҙәр 90-сы йылдар башҡорт әҙәбиәтенә үҙенсә бер характеристика булып ҡына түгел, яҙыусылар берләшмәһенең киләсәккә программаһы ла булып яңғыраны.

Һикһәненсе йылдар аҙағынан башҡорт ваҡытлы матбуғатында Мөхәмәтша Буранғолов, Зәки Вәлиди, Фәтхелҡадир Сөләймәнов (Абдулҡадир Инан), Ғарифулла Ҡейеков, Ғабдулла Амантай, Муса Мортазин кеүек исемдәре хаҡһыҙ рәүештә онотолоуға дусар ителгән шәхестәр хаҡында объектив күҙлектән асыҡтан-асыҡ яҙа башланылар, уларҙың әҫәрҙәрен, хеҙмәттәрен нәшер иттереү һәм халыҡҡа еткереү эштәре киң йәйелдерелде. Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов кеүек шағирҙарҙың заманында «милләтселек» мөһөрө баҫылып тыйылып ҡуйылған әҫәрҙәре лә, дөйөм гуманистик ҡараштан баһаланып, уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителде.

Әҙәбиәттә яңы темалар, яңы йүнәлештәр хасил булды, халыҡтың тарихи үткәненә иғтибар көсәйҙе. Әҙәби әҫәрҙәрҙең төп геройы ла, элекке ҡалыптарҙан арынып, төрләнеү, яңырыу юлына баҫты. Уның йөҙөндә төрлө ҡатлам, төрлө синыф вәкилдәре, шул иҫәптән дин әһелдәре образдарының реалистик сағылыш алыуы тәбиғи күренешкә әйләнде.

Яңы әҙәбиәттең жанрҙар системаһы ла һиҙелерлек үҙгәреш кисерҙе. Был айырыуса шиғриәттә һәм прозала асыҡ күҙәтелә. Айырым әҙиптәр ижадында мәғлүм жанрҙарҙың яңы формалары пәйҙә булды, шул уҡ ваҡытта урта быуаттар әҙәбиәтендә йәшәп кигән ҡисса, дастан, ғәзәл, робағи, тәмҫил кеүек традицион жанрҙар ҙа әҙәбиәт майҙанында яңынан үҙ урынын ала башланы.

Яманаты сыҡҡан үҙгәртеп ҡороуҙар башланған йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтендә иң алғы планға сәйәси пафослы шиғри публицистика сыҡты. Замана күренештәренә беренселәрҙән булып үҙ ҡарашын Тимер Йосопов белдерҙе. Уның «Ҡаялағы уйҙар» (1988) йыйынтығы тотошлайы менән илдәге, йәмғиәттәге хәл-ваҡиғалар тураһындағы уйланыуҙарҙан ғибәрәт. Шундай уҡ борсолоуҙар, һиҫкәнеүҙәр Ирек Ҡинйәбулатовтың «Һауығыу», Әнғәм Атнабаевтың «Буш вәғәҙә», Риф Мифтаховтың «Борсоулы уй» әҫәрҙәрендә лә күҙәтелә.

Илдәге реформаларҙы айырыуса оло һәм урта быуын әҙиптәре ауыр кисерҙе. Үҙенең «Быуат» исемле шиғырында Мостай Кәрим үҙгәртеп ҡороуҙарҙы туранан-тура ваҡытһыҙ күренеш тип атап, был хәлдең бик ауыр юғалтыуҙарға килтерәсәге тураһында киҫәтә.

Рауил Бикбаевтың «Баҙар балтаһы» поэмаһында миллионлаған кешеләрҙең күп йылдар һуҙымында нығынған өмөт, инаныстарының селпәрәмә килеүе тасуирлана. «Бөрйән ҡарағайы» шиғырында иһә автор экология проблемаларын күтәрә, Башҡортостандың тәбиғи байлыҡтарын ҡырағайҙарса талау, ситкә сығарып һатыу күренештәрен ҡаты тәнҡит итә. «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында Р.Бикбаев уҡыусыларҙың иғтибарын республика йылғаларының бысраныуына йүнәлтә. Әҫәрҙең лирик геройы — шау-шыулы ҡалала юғалып, баҙап ҡалған кеше. Ҡала был осраҡта золом, баш-баштаҡлыҡ, яһалма тормош, яһалма хистәр символы итеп кәүҙәләндерелә. Ул лирик геройҙы һәр яҡлап иҙә, рухи үлемгә табан этәрә. Был аяныслы хәлдән уны фәҡәт кешеләр тарафынан ҡәҙерләп һаҡланған тәбиғәт кенә ҡотҡара ала. Шағирҙың бындай әҫәрҙәрендә тәбиғәттең бөтөнлөгө, таҙалығы мәсьәләһе кешенең күңел таҙалығы, рухи сафлығы мәсьәләһе менән тығыҙ үрелеп килә.

Ил тарихының яңы этабында әҙиптәр халыҡ яҙмышы, уның киләсәге, милли телде һаҡлау һәм үҫтереү кеүек мәсьәләләргә айырыуса ҙур иғтибар бирә башланылар. Сөнки бөтә донъяла бик йылдам барған глобалләштереү, компьютерлаштырыу процестары иң элек аҙ һанлы халыҡтарҙың киләсәгенә хәүеф тыуҙыра, уларҙың телен, аҙаҡ үҙҙәрен дә йоттороу, юҡҡа сығарыу ҡурҡынысы менән янай. Ошондай актуаль мәсьәләләр буйынса саң ҡағыу, халыҡҡа еткереү йәһәтенән Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбай, Абдулхаҡ Игебаев, Хәсән Назар, Рәшит Шәкүр, Тамара Ғәниева, Факиһа Туғыҙбаева, Сафуан Әлибай кеүек шағирҙарҙың әҫәрҙәре бик характерлы.

Шул уҡ ваҡытта ошо ҡатмарлы заман кешеһенең эске донъяһын, күңелендә барған кисерештәрҙе яҡтыртыу йәһәтенән дә ҙур аҙымдар яһалды. Был өлкәлә ҡыҫҡа ғына ижади ғүмер кисергән Рәмзилә Хисамитдинованың поэтик тауышы бик үҙенсәлекле. Уның «Бүләк», «Ирәмәл ҡыҙы», «Әсә һүҙе» китаптарына ингән әҫәрҙәре үҙҙәренең образлы теле, хис-тойғолар ихласлығы, лирик нескәлеге менән арбай.

Үрҙә әйтелгәнсә, 90-сы йылдарҙа башҡорт шиғриәтендә «дастан» жанры ҡабаттан тергеҙелә. Таңһылыу Ҡарамышеваның «Донъя мөхәббәттән яралған», Факиһа Туғыҙбаеваның «Минең ҡошом Һомай» әҫәрҙәре — быға асыҡ миҫал. Уларҙың тәүгеһендә лирик геройҙың мөхәббәт серҙәре, шул юлдағы ғазап, шатлыҡтары үҙәктә торһа, икенсеһендә ҡаңлы ырыуының үткән юлына, тарихи шәхестәренә, уларҙың ҡаһарманлыҡ һәм мөхәббәт донъяһына поэтик күҙәтеү яһала. Башҡорт халҡының күп быуатлыҡ тарихы хаҡында уйланыуҙар Тамара Ғәниеваның «Ҡыпсаҡтар» һәм «Арҡайым» поэмаларының да үҙәгендә тора.

Сафуан Әлибайҙың «Килһен минең йылдарым» исемле шиғырҙар циклы ла заман шиғриәте өсөн яңы күренеш булды. Цикл боронғо көнсығыш календары рәүешен тота, ундағы ай исемдәре хаҡында уйланыуҙар бирелгән. Хәҙерге заман менән сағыштырыуҙар, аналогиялар уҙғарып, автор һәр йылға уңыш, бәрәкәт һәм бәхет теләй.

Ошо ҡатмарлы, шау-шыулы йылдарҙа Ҡол-Дәүләт (Рәмил Дәүләтҡолов), Хисмәт Юлдашев, Рәйес Түләк, Әхмәр Үтәбай, Буранбай Исҡужин, Искәндәриә (Тамара Юлдашева), Ғәбиҙулла Зарипов, Йомабикә Ильясова, Гөлнур Яҡупова, Рафиға Усманова, Инсур Йәһүҙин, Финат Шакирьянов, Мөхәммәт Закиров, Марат Кәбиров һәм уларҙан әҙәбиәткә бер аҙ һуңыраҡ килгән Зөлфиә Ханнанова, Салауат Әбүзәров, Айһылыу Ғарифуллина, Гөлназ Ҡотоева кеүек йәш

шағирҙар һәм шағирәләр шиғриәткә яңы быуын вәкилдәренең өмөт-хыялдарын, уй-хистәрен алып килде. Уларҙың күпселеге 90-сы йылдарға үҙҙәренең ярайһы уҡ өлгөргән уй-ҡараштары, яңы идеялары менән аяҡ баҫты. Фекер иреклеге, халыҡтың тарихи хәтеренең яңырыуы, милли үҙаңдың күтәрелеүе, йәштәр өсөн махсус баҫмаларҙың ишәйеүе, һәр яңы фекергә иғтибарлы уҡыусыларҙың күбәйеүе, үҙ мәҙәниәтен, туған телен һаҡлау һәм үҫтереү, Башҡортостандың үҙ яҙмышына хужа булыу өсөн халыҡ хәрәкәтенең киңәйеүе — былар барыһы ла йәштәр шиғриәтенә ҡыйыулыҡ та, илһам да өҫтәне[2].

Заман әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһен генә үҙгәртеп ҡалманы, шиғырҙың төҙөлөшө һәм формаһы өлкәһендә лә эҙләнеүҙәргә юл асты. Азамат Юлдашбаевтың әҫәрҙәре — аҡ шиғырҙың матур үрнәге. Уның «Метамарфозалар» йыйынтығы ҡырыҫ ысынбарлыҡҡа үҙенсә бер рефлексия булып тора, аҡ шиғыр ритмы заман ҡаршылыҡтарына ауаздаш яңғырай. Ысынбарлыҡты мөмкин тиклем тулы яҡтыртыу маҡсатында шиғырҙың яңы формаларына шулай уҡ Рауил Бикбаев, Рафаил Сафин, Ҡәҙим Аралбай, Әсхәл Әхмәт-Хужа һәм башҡа шағирҙар мөрәжәғәт итте[3].

Замандың, бөгөнгө йәмғиәттең ғәрип күренештәрен аяуһыҙ фашлаған Ғәзим Шафиҡов, Рәйес Түләк, Рәмил Ҡол-Дәүләт, Дамир Шәрәфетдинов кеүек шағирҙарҙың исемдәре совет осоронан һуңғы башҡорт шиғриәте йылъяҙмаларында лайыҡлы урын алды. Мәҫәлән, Р.Түләктең «Оран» шиғыры үҙенең йөкмәткеһе һәм стиле менән ҡобайырға тартым. Лирик геройҙың халыҡҡа монолог-мөрәжәғәте әҫәрҙең публицистик яңғырашын көсәйтә, ә кешеләргә өндәшеү стиле шиғырҙың интонацияһын эмоциональ йәһәттән күтәренке, ышандырырлыҡ итә. Монолог яуҙарҙа һәләк булған башҡорттарҙың тере рухы исеменән башҡарыла, лирик геройҙың телмәре сәсәндәрҙең йыйындарҙа халыҡ алдындағы сығышын хәтерләтә. Әҫәр тәрән патриотик рух һәм гражданлыҡ пафосы менән һуғарылған.

Башҡортостан һәм башҡорт халҡының яҙмышы тураһында уйланыуҙар, тарих төпкөлдәрен айҡау хәҙерге шиғриәттең һәм бигерәк тә поэма жанрының мөһим тенденцияһына әүерелде. Әҙиптәребеҙ башҡорт халҡын үҙ милли дәүләтен ҡороп йәшәй алырлыҡ милләт кимәленә күтәреү тураһында етди уйланып, уны алға әйҙәй башланы.

Был Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбай, Тимер Йосопов, Абдулхаҡ Игебаев, Тамара Ғәниева, Факиһа Туғыҙбаева, Рәйес Түләк ижадында айырыуса асыҡ күҙәтелә. Шиғриәттә тыуған төйәк, халыҡ өсөн ғорурлыҡ тойғоһо күргән-кисергәндәрҙән алынған һыҙланыуҙар, хафаланыуҙар менән аралашып-үрелеп килә. Хатта һуңғылары өҫтөнлөк алып китә (Р.Түләктең «Ҡашмау», Ҡ.Аралбайҙың «Аҡ тирмә», Й.Солтановтың «Минең шәжәрәм», Т.Ғәниеваның «Ҡыпсаҡтар» поэмалары һ.б.). Әммә был пессимизмға бирелеү түгел, ә ысынбарлыҡты реаль сағылдырырға, халыҡтың һәм илдең яҡты киләсәге хаҡына кешеләрҙе битарафлыҡ һаҙлығынан тартып сығарыуға ынтылыш ул.

Совет осоронан һуңғы прозала ла күп яңы йүнәлештәр барлыҡҡа килде. Был, һис шикһеҙ, тоталитар идеология догматтарынан ҡотолоу, яҙыусыларға үҙ әҫәрҙәренең тематикаһын һәм формаһын һайлау мөмкинлеге тыуыу һөҙөмтәһенә бәйле.

Яңы шарттарҙа тарихи проза ныҡ үҫеште һәм байыны. Ғайса Хөсәйеновтың «Ҡанлы илле биш», «Алдар батыр ҡиссаһы», «Пугачев фельдмаршалы» һәм

«Рудасы Исмәғил Тасим улы», Роберт Байымовтың «Сыбар шоңҡар» һәм «Ҡаруан киләә Багдадтан», Ноғман Мусиндың «Шунда ята батыр һөйәге», Ғәзим Шафиҡовтың «Атыу», Яныбай Хамматовтың «Һырдаръя» һәм «Салауат», Булат Рафиҡовтың «Сал ҡылған», «Ҡараһаҡал», «Ҡөнгәк» һәм «Ахыры заман көткәндә», Әхиәр Хәкимдең «Ҡаруан» һәм «Дала моңдары», Ғәлим Хисамовтың «Тәфтиләү» һәм «Аһура Мазда», Зиннур Ураҡсиндың «Ҡарат», Мәүлит Ямалетдиндең «Ҡуласа» кеүек әҫәрҙәре бының гүзәл үрнәктәре булып тора.

Заман һәм бөгөнгө йәмғиәт тормошона арналған байтаҡ үҙенсәлекле хикәйә, повесть һәм роман яҙылды, фантастика жанрҙары үҙ урынын нығытты. Бөгөнгө прозала Йыһат Солтанов менән Талха Ғиниәтуллин әҫәрҙәре айырымланып тора. Әгәр тәүгеһенекендә башҡорт халҡы тарихына яңыса ҡараш ташлау өҫтөнлөк итһә, икенсеһенекендә ғәҙәттәге башҡорт ауылының төрлө осорҙарҙағы тормошо, айырым кешеләр яҙмышы бар ҡатмарлығында һәм ҡырыҫ реаллегендә сағылдырыла. Реформалар осоро әҙәбиәтендә Динис Бүләков ижады үҙенең идея-тематик яңылығы, ҡуйылған проблемаларҙың үткерлеге менән айырылып торҙо. Уның «Саған япраҡ яңырта», «Шарлауыҡ», «Ҡилмешәк», «Ғүмер бер генә» һәм «Туҙҙырылған тамуҡ» кеүек әҫәрҙәрендә замандың көнүҙәк мораль-этик мәсьәләләрен күтәргән геройҙар образы үҙәккә ҡуйылған. «Ҡилмешәк» романында, мәҫәлән, йәмғиәттә барған рухи һәм социаль-ижтимағи хәл-күренештәрҙе тасуирлау аша ил тормошон үҙгәртеп ҡороу кәрәклегенә баҫым яһалһа, «Ғүмер бер генә» һәм «Туҙҙырылған тамуҡ» романдарында илдең демократия юлындағы үҫешенә аяҡ салыусы күренештәр һәм проблемалар бар киҫкенлегендә күтәрелә.

Прозала Ринат Ҡамалдың «Таня-Таңһылыу» сентименталь романы, шиғриәттәге Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» әҫәре һымаҡ уҡ, йәмәғәтселектә оло резонанс тыуҙырҙы, туған теленә, милли рухына, киләсәк яҙмышына битараф ҡалып барыусы халыҡты дәррәү уятып ебәрҙе[4]. Әҫәр сюжеты ретроспекцияға, эпистоляр элементтар менән аралашып килгән хәтирәләргә ҡоролған. Хатта уның «Таня-Таңһылыу» тип исемләнеүе лә төп герой яҙмышының ҡатмарлы булыуына ишаралай. Ҡонфликттың киҫкенлеге башҡорт ҡыҙының Петрик исемле рус егетенә кейәүгә сығып, ят даирәлә үҙ исемен, телен үҙгәртеп йәшәргә һәм ахырҙа аяныслы үлемгә дусар булыуына бәйләнгән.

Ситләтелгән ишара, кинәйәлелек Әмир Әминев әҫәрҙәренә лә хас. Уның «Ҡытайгород» повесы, тәү ҡарашҡа уйынлы-ысынлы итеп, тормошта булмаҫтай хәл-ваҡиғаны тасуирлаған һымаҡ. Әммә авторҙың тел төбөндә бер Һабай ауылының ғына түгел, тотош халыҡтың яҙмышы, киләсәге тураһындағы борсолоулы уйҙар ята. Һүрәтләнгән парадоксаль ваҡиғалар, геройҙарының телмәрҙәре аша әҙип матди байлыҡ, рәхәт тормош иҫәбенә тыуған төйәкте, ерҙәрҙе һатыуҙың халыҡ яҙмышы өсөн һәләкәтле буласағына ишаралай. Авторҙың «Танкист» повесында аталар һәм балалар, шәхес һәм йәмғиәт араһындағы рәхимһеҙ мөнәсәбәттәрҙең, матди байлыҡҡа табыныуҙың рухи ҡыйралышҡа, оло әхлаҡи юғалтыуҙарға килтереүе фашланһа, «Усман ташы» әҫәрендә бер ауыл яҙмышы арҡылы замана сире — эскелектең тотош илде деградацияға илтеүе ғибрәтле итеп бирелә, «Бер кәмәлә» повесында иһә кешенең тәбиғәткә вәхшиҙәрсә мөнәсәбәте ерҙәге тормошто бөтөнләй юҡҡа сығарыуға килтереү мөмкинлеге иҫкәртелә[5].

Ҡайһы бер прозаиктар ижадында бер үк мотив, бер үк тематиканың төрлө яҡлап, ентекле һәм тәрән итеп асылыуы күҙәтелә. Мәҫәлән, Гөлсирә Ғиззәтуллинаның «Йөҙ ҙә бер ғүмерем», «Һалҡында һүнгән усаҡ», «Күбәләккә әйләнеү» кеүек хикәйә һәм повестарында ғаиләләге бәхет һәм бәхетһеҙлек, хыянат һәм тоғролоҡ, аҫтыртынлыҡ һәм эскерһеҙлек кеүек мәңгелек темалар заман шарттарына һәм күренештәренә бәйләп, сағыу деталдәрҙә яҡтыртыла. Автор йыш ҡына әҫәрҙәрен бөйөк ижадсылар, аҡыл эйәләре һүҙҙәренән ҡоролған тәрән мәғәнәле, кинәйәле эпиграфтар менән башлай һәм шул рәүешле уҡыусыны баштан уҡ көйләй, уйланыуҙарға этәрә. Шундай уҡ алым «Һәҙиә» романында ла ҡулланылған. Бында халҡым, илем тип йән атып йәшәгән, халыҡ мәғрифәтен, әҙәбиәтен күтәреү юлында ҡорбан булған әҙибә яҙмышын тасуирлау аша үткәндәргә заман күҙлегенән баһа бирелә, ғибрәт сығарыла.

Танылған прозаик Рәшит Солтангәрәевтың үҙгәртеп ҡороуҙар башланған осорҙа яҙылған «Беҙ йәшәгән ер» романы үҙенең идея-тематик яңылығы менән Динис Бүләков әҫәрҙәренә бик ауаздаш. Автор нефтселәр тормошон тасуирлау аша бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған мөһим социаль-әхлаҡи проблемаларҙы күтәрә, матди байлыҡ артынан ҡыуып, тәбиғәтте йыртҡыстарса талаған, бәләкәй ауылдарҙы юҡҡа сығарған әҙәмдәрҙе фашлай, былдай процестарҙың илде, халыҡты һәләкәткә этәреүсе яман сир булып киң таралыуына ишаралай. Әҙиптең һуңыраҡ яҙған «Кешеләр» повесында был мәсьәләләр тағы ла ҡырҡыуыраҡ ҡуйыла. Тамырҙары быуаттар төпкөлөнә тоташҡан, бай тарихлы Башэймәҫ ауылы кешеләренең яҙмышын һүрәтләп, автор бында ҡырағай капитализм шарттарында кешенең ҡәҙере китеүен, ғәҙеллек, игелеклелек, намыҫлылыҡ кеүек изге сифаттарҙың аяҡ аҫтына һалып тапалыуын төрлө контраст алымдар, реалистик һәм сюрреалистик картиналар аша яҡтырта. Ғөмүмән, Р. Солтангәрәев хикәйәләре һәм повестары уҡыусының иғтибарын идея-тематик яңылығы, йөкмәткеһенең байлығы, психологизмдың көслө булыуы һәм композицияһының уңышлы төҙөлөшө менән йәлеп итте.

Әҫәр композицияһының уңышлы булыуы, һис шикһеҙ, яҙыусының ижади маһирлығына бәйләнгән. Хәҙерге башҡорт прозаһынан быға байтаҡ миҫал килтерергә була. Ноғман Мусиндың «Һуңғы солоҡ», «Ғәйет намаҙы, йәки Ҡара шәлле ҡатын», «Ҡала себене» һәм «Йыртҡыс тиреһе», Талха Ғиниәтуллиндың «Ҡара баҫыу», «Ҡапҡа» һәм «Бүре», Ринат Камалдың «Оҙонтал», Шакир Янбаевтың «Биләүҙәр-биләместәр», Барый Ноғомановтың «Һуҡыр атай», Гөлсирә Ғиззәтуллинаның «Еүеш асфальт түҫөндәге мерседес», Роберт Байымовтың «Хыянат», Аҫылғужа Баһумановтың «Ниндәй көн был...», Сабир Шәриповтың «Имән бағана», Мостай Кәримдең «Ауыл адвокаттары» һәм «Ярлыҡау», Ибраһим Абдуллиндың «Ҡояш байымай ҙа байымай», Таңсулпан Ғарипованың «Мәңгелек ваҡыт», Мөслим Әбсәләмовтың «Хәлфә», Ғайса Хөсәйеновтың «Ҡанлы илле биш», Мөнир Ишбулатовтың «Әруахтар ғәҙеллек юллай», Наил Ғәйетбайҙың «Буран», Әмир Әминевтың «Танкист» һәм «Усман ташы», Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар» һәм «Көмөш туй», Фәрзәнә Аҡбулатованың «Әлморонда — бал тәме» кеүек әҫәрҙәре был йәһәттән бик характерлы. Уларҙа «борондан ҡулланыла килгән композиция алымдары яңырыш кисерә, элек формаль функция ғына үтәгәндәренә хәҙер мөһим идея-эстетик нагрузка йөкмәтелә, традицион алымдар менән бергә яҙыусылар яңы, авангард сюжет-композиция ҡоролошона ла мөрәжәғәт итәләр, ижади тәжрибәләр яһайҙар»[6].

Бөгөнгө әҫәрҙәрҙең, шул иҫәптән үрҙә һанап үтелгән хикәйә, повесть, романдарҙың күпселегендә заман күренештәре һәм замандаш образы үҙәккә ҡуйылған. Хатта үткәндәргә бағышланған әҫәрҙәрҙә лә бөгөнгө хәл-ваҡиғаларға кинәйә ята, теге йәки был кимәлдә улар менән уртаҡлыҡтар күҙәтелә.

Замандаш образын кәүҙәләндереү йәһәтенән Флүр Ғәлимовтың «Яңы башҡорт» романы иғтибарға лайыҡ. Әҫәр ҡырағай капитализмға аяҡ баҫҡан яңы Рәсәй, яңы Башҡортостан шарттарында шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнгән йәш кешенең яҙмышын хроника рәүешендә тасуирлауға ҡоролған. Хикәйәләү ҙә уның исеменән алып барыла. Урта быуат көнсығыш әҙәбиәтенең ҡумталы композицияға ҡоролған әҫәрҙәре кеүек, роман бүлектәргә бүленеп, һәр бүлеге айырым-айырым хикәйәләрҙән ғибәрәт. Ҡешелекле, һәр кемгә ярҙамсыл башҡорт бизнесмынының идеаль образын тыуҙырыу маҡсатында һәр осраҡты ентекләп бәйән итеүгә ҡоролғанлыҡтан әҫәр публицистик хроника төҫө алып китә, һәм был, әлбиттә, уның художество-эстетик ҡиммәтенә кире йоғонто яһай.

Ҡиң планлы, күп сюжетлы әҫәрҙәр араһында Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» романы айырым урын тота. Биш китаптан («Мөңрәй-мөңрәй килә Бөйрәкәй», «Башҡынайым ҡалды йәш кенә», «Һандуғастың һайрар ғүмеркәйе», «Йондоҙҙар төндә тоҡана», «Ҡояшлы бурандар») торған был әҫәр тотош быуат эсендә барған ваҡиғаларҙы, Тирәкле ауылынан сыҡҡан дүрт быуын вәкилдәренең яҙмышын хикәйәләүгә ҡоролған. Шулай ҙа үҙәктә Мәҙинә образы тора. Өләсәһе Барсынбикәнең һәм әсәһе Гөлбаныуҙың изге сифаттарын үҙенә туплаған был ҡыҙ, тормоштоң барлыҡ ауырлыҡтарын еңеп, үҙ тырышлығы, тәбиғәттән бирелгән һәләте, ихтыяр көсө менән танылған йырсы, данлыҡлы һауынсы булып етешә, яңы дәүләт шарттарында иһә булдыҡлы бизнес-леди булып китә. Әҫәр сюжеттарын мәғәнәүи нигеҙҙә көсәйтеүсе Бөйрәкәй, Ҡүк бүре, Аҡмаңлай кеүек хайуандарҙың мистик образдары менән бәйләп, характерҙар үҫешен автор юғары психологик, эстетик кимәлдә яҡтырта. Ошо йәһәттән Бөйрәкәй образы ҙур табыш булып тора: Бөйрәкәй тоҡомо тотош быуат буйына йәшәп килгән кеүек, төп геройҙарҙың — дүрт быуын ҡатын-ҡыҙҙарҙың күсәгилешлек традициялары романға бик көслө эпик төҫ биреп килә.

Бөгөнгө ысынбарлыҡ һәм замандаш образы Хәйҙәр Тапаҡов, Хәбир Дауытов, Нажиә Игеҙйәнова, Марсель Искәндәр, Рәлис Ураҙғолов, Тимерғәле Ҡилмөхәмәтов, Илгизәр Бураҡаев (Диҡҡәт), Факил Мырҙаҡаев, Марс Әхмәтшин, Зөфәр Толомғужин һәм башҡа прозаиктар ижадында ла үҙенсәлекле сағылыш тапты. Хәҙерге йәмғиәттең боҙоҡ һәм тиҫкәре яҡтары иһә МарСәлим (Марсель Сәлимов), Марат Ҡәримов, Риф Мифтахов, Рәдиф Тимершин, Мансаф Ғиләжев кеүек һүҙ оҫталарының сатирик һәм юмористик әҫәрҙәрендә «утҡа тотолдо».

Илдә барған сәйәси һәм иҡтисади үҙгәрештәр драматургияға ла йоғонто яһамай ҡалманы, әлбиттә. Идеологик ҡоршауҙарҙан ҡотолғас, башҡорт драматургтары халҡыбыҙҙың бөйөк улдары һәм ҡыҙҙары, тарихи үткәне һәм бөгөнгө ысынбарлыҡ тураһында ҡыйыуыраҡ яҙа башланылар, төрлө жанрҙарҙа үҙенсәлекле сәсмә әҫәрҙәр ижад иттеләр. Бигерәк тә Ғәзим Шафиҡовтың «Операция», «Иҫке фатир», «Урал батыр» һәм «Һәҙиә», Флорид Бүләковтың «Бибинур, аһ, Бибинур!», «Ҡанатланып ос һин, толпарым!», «Ай ҡыҙы» һәм «Шайморатов генерал», Нәжиб Асанбаевтың «Вәлиди» һәм «Ҡыңғырау сәскә», Наил Ғәйетбайҙың «Аҡ төндәр, йәки Аҡмулла», «Илама һылыу» һәм «Төн»,

Илшат Йомағоловтың «Нәркәс», «Семәрле тәхет» һәм «Сәсәндәр», Азат Абдуллиндың «Раббым баҡсаһы» пьесалары үҙенә бер яңы күренеш булдылар. Башҡорт драматургияһының иң яҡшы традициялары шулай уҡ Кәбир Аҡбашев, Гөлшат Әхмәтҡужина, Таңсулпан Ғарипова, Хәмит Ирғәлин, Буранбай Исҡужин, Рәлиф Кинйәбаев, Сөләймән Латыпов, Мөкәрәмә Садыҡова, Рәмил Ҡол-Дәүләт, Артур Иҙелбаев, Салауат Әбүзәров, Тәнзилә Дәүләтбирҙина әҫәрҙәрендә дауам иттерелде һәм байытылды.

Миҫал өсөн бер нисә әҫәргә ҡыҫҡаса туҡталып үтәйек. Илшат Йомағолов үҙенең «Юғалтыуҙар аша», «Торналар ҡайта» һәм «Буш сәңгелдәк» драмаларында интеллигенция вәкилдәре образдарына мөрәжәғәт итә. Төп геройҙар Сәйәр, Рәхим Ирназарович һәм Рәхимәне шәхси милекселек закондары буйынса йәшәргә ынтылыу берләштерә. Сәйәргә («Юғалтыуҙар аша») яңы шарттарҙа үҙенең картиналарын һатыу мөмкинлеге сыҡмай, шул арҡала кәләше лә ташлап китә уны. Әммә төп герой баҙап ҡалмай, ахырҙа кәләшен табып, уға карьераһын үҫтерергә ярҙам итә. Рәхим Ирназарович («Торналар ҡайта»), ҡатынының хыянатын белеп, өйөнән китһә, Рәхимә («Буш сәңгелдәк») күп балалы тол ҡалған ир менән йәшәр өсөн үҙенең белдекһеҙ-булдыҡһыҙ тормош иптәше менән айырылыша. Был геройҙар, замана боҙоҡлоҡтарына бирешмәйенсә, үҙ идеалдарына тоғро булып ҡалалар.

Совет осоронан һуңғы әҙәбиәттә Флорид Бүләков драмалары айырым урын тота. Һикһәненсе йылдар аҙағында яҙылған «Баллы ай», «Атылған өйөр» трагедияларынан һуң әҙип тоталитар режимды һәм бөгөнгө йәмғиәттең әшәке яҡтарын фашлаған тотош драматик цикл ижад итте («Бибинур, аһ, Бибинур!», «Таштуғай», «Ҡыҙҙар ни өсөн илай?», «Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы» һ.б.). Был әҫәрҙәрҙең күпселегендә кеше яҙмышы мөхәббәт темаһы менән тәбиғи ялғанып, драматик һәм трагик коллизияларҙа, ирония һәм юмор ҡатыш ғибрәтле хәл итеlә. «Шайморатов генерал» пьесаһында иһә Бөйөк Ватан һуғышындағы героик-трагик ваҡиғалар мораль-әхлаҡи планда төп геройҙың һәм персонаждарҙың тәрән психологик кисерештәре аша яҡтыртыла.

Нәжиб Асанбаевтың өс пьесанан («Аҡтамыр», «Тарих яҙыр инем ташына», «Исемең ҡайтты, Вәлиди!») торған «Вәлиди» трилогияһы хәҙерге драматургияның ҙур ҡаҙанышы булып ҡабул ителде. Әҫәрҙең үҙәгенә башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе, Башҡортостан Республикаһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе, исеме донъяға танылған тарихсы, шәрҡиәтсе Әхмәтзәки Вәлиди Туған образы ҡуйылып, уның эшмәкәрлеге һәм яҙмышы ҡатмарлы, көсөргәнешле эпизодтар аша фәһемле итеп асып бирелгән.

Наил Ғәйетбайҙың драматург булараҡ ижады Һәҙиә Дәүләтшина менән Рәми Ғарипов яҙмыштарына арналған «Төн» трагедияһы, «Дүрт кешелек табын» драмаһы, «Аты барҙың — дәрте бар» комедияһы кеүек әҫәрҙәрҙә асыҡ сағыла. Теленең образлылығы, конфликттың ҡырҡыулығы, новеллаға хас элементтарҙың күплеге менән айырылып торған был пьесаларында автор мөһим социаль һәм әхлаҡи-этик проблемалар күтәрә. Мәҫәлән, «Дүрт кешелек табын» драмаһында бар көсөн һәм ваҡытын хеҙмәткә, йәмәғәт эштәренә сарыф иткән ҡатындың үҙенең иң яҡын кешеләре — ире һәм ҡыҙы менән рухи яҡынлығын юғалтыуы үҙәккә ҡуйылһа, «Ауылға ҡыҙҙар килде, йәки Моңдар ҡайтһын ауылға» комедияһында көлкөлө ваҡиғалар аша тик буйҙаҡ егеттәр һәм ҡарт-ҡоролар тороп ҡалған башҡорт ауылдарының яҙмышы тураһында саң ҡағыла.

Ғәзим Шафиҡовтың «Мәмерйә» трагедияһы, драматургтың күпселек әҫәрҙәренә хас булғанса, эш-хәрәкәттәрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың парадоксаллеге, көтөлмәгәнлеге менән иғтибарҙы йәлеп итә. Әҫәрҙәге төп конфликт тыуған яҡтың йөҙөк ҡашы булған боронғо мәмерйәне Америка бизнесмынына һатырға уйлаған район етәксеһе менән ер һатыуға ҡаршы сыҡҡан рәссам Солтан араһындағы мөнәсәбәттәргә бәйле төйөнләнә. Әммә көстәр тигеҙ түгел. Түрәнең енәйәтсел баш-баштаҡлығына ҡаршы торор әмәл тапмайынса, рәссам хәл иткес ҡарарға килеп, мәмерйәне шартлата һәм үҙе лә шунда һәләк була. Геройҙың тәбиғәт байлығы өсөн үҙ-үҙен ҡорбан итеүе төрлө уйланыуҙарға этәрә: бер яҡтан, автор власть әһелдәренең аҡылһыҙ аҙымдары милли һәләкәткә килтерәсәгенә ишара яһаһа, икенсе яҡтан, тәбиғи һәм тарихи ҡомартҡының шартлатылыуы аптырауыҡлы һорауҙар ҙа уята.

Әлбиттә, драматургтар үҙ ижадында заман сиренә әйләнгән эскеселек һәм наркомания проблемаларын да урап үтмәй. Т.Дәүләтбирҙинаның «Минең ғаиләм» пьесаһында, мәҫәлән, бөгөн йыш күренешкә әйләнгән ҡатын-ҡыҙ алкоголизмы һәм уның арҡаһында килеп тыуған аяныслы ваҡиғалар, социаль конфликттар үҙәккә ҡуйылған.

Замана елдәре, әлбиттә, балалар әҙәбиәтен дә урап үтмәне. Ҡескәйҙәр һәм үҫмерҙәр өсөн яҙылған әҫәрҙәр идея-тематикаһы йәһәтенән дә, жанр тәбиғәте буйынса ла, образдар системаһы яғынан да күпкә төрләнде һәм байыны. Балаларға тәғәйен бик күп әҫәр ижад иткән Ҡәтибә Ҡинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова, Сафуан Әлибай, Абдулхаҡ Игебаев, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Гөлфиә Юнысова-Иҙелбаева, Раил Байбулатов, Факиһа Туғыҙбаева, Булат Рафиҡов, Зарема Әхмәтйәнова, Нажиә Игеҙйәнова, Ғәлим Хисамов, Наил Ғәйетбай кеүек оло һәм урта быуын әҙиптәре сафына 1990—2000 йылдар арауығында Зөһрә Ҡотлогилдина, Айһылыу Йәғәфәрова, Факил Мырҙаҡаев, Гүзәл Ситдиҡова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Фәрзәнә Аҡбулатова, Сәрүәр Сурина, Динә Талхина, Рәмзәнә Әбүталипова, Илдус Тимерханов, Фәниҙә Исхаҡова, Әлфиә Әсәҙуллина, Лира Яҡшыбаева, Луиза Азамат, Сәлмән Яҡупов, Гөлсирә Шафиҡовалар өҫтәлде. Уларҙың әҫәрҙәрендә традицион темалар менән бергә заманға хас яңы темалар һәм проблемалар ҙур урын биләй. Ҡескәйҙәргә аңлайышлы һәм яҡын булған тел саралары һәм образдар аша тыуған төйәк һәм уны ҡәҙерләп һаҡлау, башҡорт халҡының данлы тарихы һәм бөйөк шәхестәре, оло ватан һәм кешелек донъяһы, фән һәм техника ҡаҙаныштары кеүек йәш быуынға аң-белем таратыу, патриотик тәрбиә биреү маҡсатын тотҡан мәсьәләләр ҡуҙғатыла.

Әгәр һикһәненсе йылдар балалар әҙәбиәтендә «мәктәп прозаһы» ҙур активлыҡ күрһәтһә (Раил Байбулатов, Наил Ғәйетбай, Мирас Иҙелбаев, Фәүзиә Рәхимғолова, Нажиә Игеҙйәнова һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре), туҡһанынсы йылдарҙа фантастик әҙәбиәт йылдам үҫеш кисерҙе. Миҫал өсөн Наил Ғәйетбайҙың «Ҡара ҡумта», «Хушлашыу» һәм «Сит планетала» повестарынан торған трилогияһын атарға була. Унда Батыр исемле үҫмер малайҙың дуҫтары менән Ер шарындағы һәм сит планеталарҙағы енәйәтселәр менән ҡыйыу көрәше мауыҡтырғыс итеп бәйән ителә. Сәғит Сәлимгәрәевтың «Еңелмәҫ Йәнеш» әҫәре башҡорт иլендәге серле һәм тылсымлы күренештәргә арналған булһа, Ғәлим Хисамовтың «Шерлок Холмс иламай» повесының төп геройҙары булып тарихи ҡомартҡыларҙы урлау менән шөғөлләнеүсе контрабандистарға ҡаршы көрәшкән ҡаһарман разведчиктар тора.

Балаларға тәғәйенләнгән драма әҫәрҙәренән Сафуан Әлибайҙың «Тайыш табан йоҡлай алмай» һәм «Серле сәйәхәт», Айһылыу Йәғәфәрованың «Бөҙрәкәй», Гөлсирә Шафиҡованың «Аҡбуҙат», Сәрүәр Суринаның «Алтын балта» пьесалары иғтибарға лайыҡ. Халыҡ экиәттәренә хас алымдарҙы мул ҡулланып, мауыҡтырғыс итеп яҙылған был сәхнә әҫәрҙәре кескәй уҡыусылар тарафынан бик ҡыҙыҡһынып ҡабул ителде.

Советтар иле тарҡалғандан һуңғы осорҙа әҙәби публицистика ла һиҙелерлек үҙгәреш кисерҙе. Был үҙгәреш ваҡытлы матбуғат биттәрендәге сығыштарҙың идея-тематикаһында ла, жанр, стиль өлкәләрендә лә асыҡ күҙәтелде. Йәмғиәтте борсоған көнүҙәк мәсьәләләргә арналған мәҡәләләр, юлъяҙмалар, хәтирәләр, асыҡ хаттар халыҡсан рух, фекер ҡыйыулығы, тура һүҙлелек кеүек заманса сифаттар менән байыны, уҡыусыны ғәмһеҙлек, битарафлыҡ йоҡоһонан уятып, халыҡ, ил яҙмышы тураһында уйланырға, сәйәси-ижтимағи эштәрҙә әүҙем булырға өндәне. Был йәһәттән Ғайса Хөсәйенов, Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Рәүеф Насыров, Ҡәҙим Аралбай, Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева, Әхмәр Үтәбай, Ринат Камал, Рәшит Шәкүр, Әхмәт Сөләймәнов, Ғиниәт Ҡунафин, Мәүлит Ямалетдинов, Ноғман Мусиндарҙың сығыштары фәһемле.

Публицистиканың йәнләнеүенә, әлбиттә, республикала ваҡытлы матбуғат баҫмаларының ишәйеүе лә булышлыҡ итмәй ҡалманы. Совет осоронан уҡ йәшәп килгән баҫмалар менән бер рәттән яңыраҡ сыға башлаған «Ватандаш» һәм «Шоңҡар» журналдары, «Йәшлек» һәм «Киске Өфө» гәзиттәре ысын мәғәнәһендә халыҡ трибунаһына әүерелде.

Заман башҡа — заң башҡа, тигәндәй, бөгөнгө йәмғиәт тормошон компьютер, интернетһыҙ күҙ алдына ла килтереп булмай. Йылдам үҫешкән интернет селтәрҙәре, электрон баҫмалар медиабаҙар өлкәһендә торған һайын ҙурыраҡ урын ала бара. Башҡорт публицистикаһы, бер аҙ һуңлап булһа ла, ошо өлкәлә лә әүҙемлек күрһәтә башланы, йәш быуын журналистар үҙҙәренең ижад емештәрен, халыҡҡа әйтер һүҙен төрлө электрон сайттарға ла сығара.

Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте ҡатмарлы осор кисерә, һуңғы ике тиҫтәнән артыҡ йыл эсендә илдә туҡтауһыҙ барған реформалар, буталсыҡтар, яманаты сыҡҡан «оптималләштереү» процестары һүҙ сәнғәтенең ирекле үҫешенә ҙур тотҡарлыҡ яһай, әммә ижад туҡталмай, әҙәбиәт идея-йөкмәтке йәһәтенән дә, форма йәһәтенән дә үҙгәреүен, үҫеүен дауам итә.

**Әҙәбиәт**


[1] *Бикбаев Р.* Литература поиска и созидания // Судьба Земли, дыхание времени. Уфа, 2009. — 392-се б.

[2] *Бикбаев Р.* Быуаттарҙың шиғри йылъяҙмаһы // Башҡорт шиғриәте антологияһы. Өфө, 2001. — 243-сө б.

[3] *Хөсәйенов Ғ.* Хәҙерге башҡорт шиғыры (Традиция һәм новаторлыҡ мәсьәләләре) // "Ағиҙел", 2004, №12. — 101—117-се бб.

[4] *Гәрәева Г.Н.* Башҡорт прозаиктары. Өфө, 2012. — 413-сө б.

[5] Шунда уҡ. — 407—408-се бб.

[6] *Гәрәева Г.Н.* Хәҙерге проза үҙенсәлектәре. Өфө, 2009. — 221-се б.